*Рөстәм ШАЙМОРАТОВ,*
*кадрҙар бүлегенең тәрбиә эше буйынса*
*инспекторы, эске эштәр хеҙмәте*
*өлкән лейтенанты*



# Курсанттар тынғылыҡ белмәй

Курсант тормошо Уставҡа, көн тәртибенә һәм институт начальнигының приказдарына буйһона. Һәр көн иртәнге физик күнегеүҙәрҙән башлана, сөнки ул ихтыяр көсө һәм түҙемлелек тәрбиәләүҙең, тәнде сыныҡтырыуҙың айырылғыһыҙ өлөшө. Даими физик күнекмәләр, ял һәм байрам көндәрендә маршбросоктар, спартакиадалар сәләмәтлекте нығытыуға булышлыҡ итә. Ҡыҫҡаһы, курсанттың һәр көнө бәләкәй һынауҙан башлана. Әммә ниндәй генә һынау булмаһын, ул кешегә үҙен эске эштәр органдарының тулы хоҡуҡлы хеҙмәткәре итеп тойорға ярҙам итә. Сөнки улар биргән Антта былай тиелә: «Эске эштәр органдары хеҙмәткәре үҙ хеҙмәтенә бәйле барса ҡыйынлыҡтарҙы лайыҡлы кисерергә тейеш». Һуңғы йылдарҙа институтҡа уҡырға ингән курсанттарҙың күпселеге кисәге мәктәп уҡыусылары һәм улар курсант тормошондағы ҡыйынлыҡтарға беренсе тапҡыр осрай.

Курсанттарҙа Ватанға һөйөү һәм Антҡа тоғролоҡ, һайлаған һөнәре өсөн ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелә. Беҙҙең курсанттар ижтимағи-файҙалы эштәрҙә, экологик өмәләрҙә әүҙем ҡатнаша. Уларҙың тырышлығы һөҙөмтәһендә Софья Перовская урамында, Каменский тыҡрығында, Еңеү паркында тәртип булдырылған. Институт эргәһендәге майҙанды таҙа һәм йыйнаҡ тотоу ҙа мөһим бурыс иҫәпләнә, ә был иһә курсанттарҙың тырышлығына бәйле. Шәмбе көндәрендә хәрби-хеҙмәт әҙерлек буйынса подразделениеларҙа парк-хужалыҡ көнө үткәрелеп, дөйөм ятаҡта йәшәү шарттарын яҡшыртыу, биналарҙа уңайлылыҡ булдырыу, беркетелгән майҙанды таҙартыу, йәшелләндереү саралары күрелә.

Курстар етәкселәре йәштәр хаҡында ҙур хәстәрлек күрә, шәхси состав менән эште аныҡ һәм оҫта ойоштора. Һәр курста ял бүлмәләре булдырылған, кино-, видеоаппаратуралар менән йыһазландырылған, тере йәнлектәр һәм ҡоштар мөйөшө бар. Даими рәүештә «Ҡалҡан һәм ҡылыс», «Милиция», «Енәйәт һәм яза» һәм башҡа гәзит-журналдар алдыралар бында. Курсанттар төрлө китапханаларға йөрөп тә үҙҙәренең мәҙәни, дөйөм белем кимәлен күтәрергә ынтыла.

Беҙҙең дөйөм ятаҡтарҙа йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған, ундағы матур итеп биҙәлгән стендтар курсанттарға уҡыуҙа һәм хеҙмәттә ярҙам итә. Уларҙың исемдәре үк әйтеп тора: «Беҙ йәшәгән һәм уҡыған ҡала», «Уҡыу алдынғылары», «Иң яҡшы спортсылар», «Яугир-интернационалистар», «Сәләмәтлек мөйөшө», «Курс ҡаҙаныштары», «Өлгәш экраны», «Ҡарауыл хеҙмәте» һ.б.

Өфө юридик институты курсанттары институтта үткәрелгән бөтә ижтимағи, мәҙәни сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Курстарҙа ата-әсәләр йыйылыштары, ял кисәләре, төрлө ярыштар, викториналар, «Иң яҡшы взвод», «Йәгеҙ әле, ҡыҙҙар», «Йәгеҙ әле, егеттәр» һәм башҡа  конкурстар үткәрелеп тора. «Өлгөлө бүлмә», «Иң яҡшы курс», художестволы үҙешмәкәрлек, стена гәзиттәре, йырҙар, фото конкурстары, төрлө күргәҙмәләр ҙә популяр һанала.

Бик күп курсанттар үҙҙәрен штаттан тыш хәбәрсе һәм биҙәүсе рәссам булараҡ та танытып өлгөрҙө. Курсанттарҙың тормош-көнкүреше хаҡында материалдар юридик институттың квартал һайын сыға торған «Вестник» журналында баҫыла.

Беҙ курсанттарҙа инициативалыҡты, үҙенең белемен һәм талантын күрһәтергә ынтылышты үҫтерергә тырышабыҙ. Курстарҙа үҙидара органы – курс советы эшләп килә, ул талиптарҙың ижтимағи тормошона тейешле йүнәлеш бирә, уны тикшереп тора. Был совет составына взвод командиры, редколлегия, курс һәм взводтарҙың мәҙәни, физик эштәрҙе ойоштороусылары, намыҫ суды ағзалары инә. Һәр иҫтәлекле байрам йәки ваҡиға стена гәзитендә сағылыш таба. Йыл һайын стена гәзиттәренә конкурстар үткәрелеп, еңеүселәр билдәләнә, күргәҙмә һөҙөмтәләре буйынса мөхәррирҙәргә бүләктәр тапшырыла. Намыҫ судының эше лә мөһим. Шуны ла әйтергә кәрәк, күпселек ултырыштар курстың асыҡ йыйылышында үтә, бында аудиторияның фекере лә иҫәпкә алына. Башҡа курсанттарға йоғонто яһаусы тәрбиә факторына шулай өлгәшелә.

Ҡыҫҡаһы, курсанттар ҡыҙыҡлы һәм файҙалы тормош менән йәшәй, бөтә үткәрелгән саралар курсанттарҙың әхлаҡи-психологик торошон сафландыра.